МИНИСТЕРСТВО ПРОСВЕЩЕНИЯ РОССИЙСКОЙ ФЕДЕРАЦИИ

Министерства образования и науки Республики Башкортостан

Администрация городского округа город
Нефтекамск Республики Башкортостан

Муниципальное общеобразовательное автономное учреждение
средняя общеобразовательная школа №11
городского округа город Нефтекамск Республики Башкортостан

| РАССМОТРЕНО | СОГЛАСОВАНО | УТВЕРЖДАЮ |
| --- | --- | --- |
| на заседании ШМО руководитель ШМО учителей родных языков и литературы, башкирского языка, ИКБ и ОДНКНР | Заместитель директора по учебной работе МОАУ СОШ №11 | Директор МОАУ СОШ №11 |
| ____________________ | ________________________ | ________________________ |
| /И.Ф. Валиева/ | /Р.Р. Ямалтдинова/ | /И.Г. Аллаяров/ |
| Протокол №1 от 30.08. 2024г. | Протокол МС от 30.08.2024г.№1 | Приказ № 576 от 30.08. 2024г. |

ДОКУМЕНТ ПОДПИСАН
ЭЛЕКТРОННОЙ ПОДПИСЬЮ

Сертификат: 00E04301A6D9BD4262D6EC61772058B4B2
Владелец: Аллаяров Илдар Габидович
Действителен: с 19.06.2024 до 12.09.2025

# КОНТРОЛЬНО-ОЦЕНОЧНЫЕ СРЕДСТВА по учебному предмету «Государственный (башкирский) язык Республики Башкортостан»

для обучающихся 3 класса

**г.Нефтекамск, 2024**

1. **Аңлатма яҙыу.**

Башҡорт теленән тикшереү эштәре.

Тикшереү эштәре дәрестә үтелгән грамматик һәм лексик темалар менән бәйле алына.

-Тикшереү эшенең йөкмәткеһе һәм структураһы түбәндәге документтарға таянып төҙөлдө:

**1.** "Рәсәй Федерацияһында Мәғариф тураһында" Федераль законы №273-ФЗ, 29.12.2012й.

2. Нефтекама ҡалаһы 11-се мәктәптең муниципаль дөйөм автономия белем биреү учреждениеһының уҡыу планы.

3. “Рәсәй Федерацияһы халыҡтары телдәре тураһында” Законы (№1807, 25.10.1991й.).

4.“Башҡортостан республикаһы халыҡтары телдәре тураһында ” БР Законы (216 –З, 15.02.1999 й.)

5. Төп дөйөм белем биреүҙең төп белем биреү программаһы (№ 872, 13.12.2018 й.)

6. Дөйөм белем биреү ойошмаларында уҡытыу рус телендә алып барылған 1-4 кластар өсөн (башҡорт теле һәм әҙәбиәте) уҡыу предметы буйынса дөйөм белем биреү өлгө программаһы.

7. Башҡортостан Республикаһы Мәғариф һәм фән министрлығы коллегияһы ҡарары 29.08.2024 йыл.

2. **Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары**

Тикшереү эше 1 өлөштән тора.

-Эштең үтәлеү ваҡыты.

-Тикшереү эште башҡарыу өсөн 40 минут бирелә.

- Өҫтәлмә материалдар һәм күргәҙмәлек ҡулланылмай.

- Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары.

Тикшереү эшендә биргән яуаптарҙы билдәләү нормалары

Башҡорт теленең ағымдағы, сирек йәки йыл аҙағында, шулай уҡ уҡыу йылы башында инеү диктанты, ҙур темаларҙан һуң йомғаҡлау контроль эштәре үткәрелә. Ағымдағы контроль эштәр программаның өйрәнелгән материалын үҙләштереүҙе тикшереү маҡсатында уҙғарыла. Уларҙың төрө һәм үткәреү йышлығы өйрәнелә торған материалдың ҡатмарлылығынан, уҡыусыларҙың белем кимәленән сығып билдәләнә. Ағымдағы контроль эштәр өсөн уҡытыусы йә тотош дәресте, йә уның бер өлөшөн генә файҙалана ала.

Программа материалының үҙләштереү кимәле уҡыусыларҙың дәрестәрҙә телдән биргән яуаптарына һәм яҙма эштәренә ҡарап баһалана.

Уҡыусының яуабын баһалағанда, түбәндәге критерийҙар менән эш итепергә тейеш:

1. Яуаптың тулы һәм дөрөҫ булыуы;
2. Үтелгәнде аңлы үҙләштереү, аңлау кимәле;
3. Яуаптың телмәр төҙөлөшө, әҙәби тел нормаларына ярашлы булыуы.

Уҡыусының яҙма рәүештә биргән яуабы үтелгән материалдың уҡытыусы тәҡдим иткән өлөшөнә логик эҙмә-эҙлекле аңлатманы эсенә алған бәйләнешле телмәр булырға, яуап биреүсе баланың өйрәнелгән ҡағиҙәләргә,билдәләмәләргә таянып эш итә белеүен күрһәтергә тейеш.

Әгәр уҡыусы:

1. Тәҡдим ителгән теманы тулы аңлатһа, тел төшөнсәләренә дөрөҫ билдәләмә бирһә;
2. Үтелгән материалды тулы аңлауын, белемдәрен практик ҡуллана белеүен күрһәтһә;

3. Материалды эҙмә-эҙлекле һәм әҙәби тел нормаларына ярашлы аңлатһа, унын яуабы **«5» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы «5» билдәһен ҡуйыу талаптарына ярашлы яуап бирһә, ләкин һирәк яһала торған хаталар ебәреп тә уҡытыусы иҫкәртеүенән һуң уларҙы төҙәтеп барһа, телендә, телмәр төҙөлөшөндә һирәк - һаяҡ яңылышлыҡтар китһә, унын яуабы «**4» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы тәҡдим ителгән темаға ҡараған төп төшөнсәләрҙе аңлауын һәм белеүен күрһәтһә,ләкин

1. Материалды тулы аңлата алмаһа,төшөнсәләрҙең һәм ҡағиҙәләрҙең билдәләмәһендә хаталар ебәрһә;
2. Әйткән фекерҙәрен тулы һәм иҫбатлауҙы нигеҙләй белмәһә, үҙ миҫалдарын килтерә алмаһа;
3. Яуабында эҙмә-эҙлелек һаҡланмаһа,телмәр төҙөлөшөндә хаталар булһа, унын яуабы **«3» билдәһе** менән баһалана.

Әгәр уҡыусы һоралған материалдың күберәк өлөшөн белмәүен, билдәләмәләрҙе һәм ҡағиҙәләрҙе әйткәндә уларҙың төп фекерен боҙоуға килтерә торған хаталар ебәрһә, материалды икеләнеүҙәр менән системаһыҙ аңлатһа, унын яуабы «**2» билдәһе** менән баһалана

### 3. Башҡорт теле буйынса белемдәрен һәм күнекмәләрен баһалау нормалары

- Өҫтәлмә материалдар һәм күргәҙмәлек ҡулланылмай.

Әгәр ҙә өҫтәлмә эш алынмаһа, күсереп яҙыу тексы бер генә билдә менән баһалана.
«5» билдәһе төҙәтеүҙәр, бысратыуҙар булмаған, йә 1 пунктуацион хата булған эшкә,
«4» билдәһе 2 орфографик, 3 пунктуацион йә 1 орфографик, 4 пунктуацион, йә орфографик хатаһыҙ, 6 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Әгәр хаталар араһында бер типтағылар булһа, 3 орфографик хаталы эшкә лә «4» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«3»билдәһе 3 орфографик, 4 пунктуацион йә 7 пунктуационхаталыэшкәҡуйыла. Әгәрэштәөсбертиптағы хата ебәрелһә, 2 орфографик, 4 пунктуационхаталы эшкә лә «3» билдәһе ҡуйырға мөмкин.

«2» билдәһе 6 орфографик, 8 пунктуацион йә 10 пунктуацион хатаһы булған эшкә ҡуйыла. Хаталар һаны 8 орфографик хатанан да артып китһә, «1» билдәһе ҡуйыу уҡытыусы ҡарамағында.

Әгәр тексты күсереп яҙыуҙан һуң өҫтәмә грамматик, орфографик, лексик эштәр тәҡдим ителһә, уларҙың һәр береһе айырым баһалана.
Грамматик биремдәрҙе баһалағанда түбәндәгеләрҙе иҫәпкә алыу тәҡдим ителә:
«5» билдәһе бөтә эште лә теүәл йә бер хата булғанда,
«4» билдәһе эштең яртыһынан күберәге дөрөҫ эшләнгәндә,
«3» билдәһе яртыһынан әҙерәге дөрөҫ әшләнгәндә,
«2» билдәһе бер эш тә дөрөҫ эшләнмәгәндә ҡуйыла.

4. **Тикшереү эштәре.**

**Комплекслы инеш контроль эше.**

1. Зачеркни лишнее слово.

| | | |
|---|---|---|
| атай | мин | бал |
| олатай | туңдырма | әсәй |
| ҡусты | һут | һөт |
| бәлеш | балыҡ | ҡоймаҡ |

**2.** Соотнеси слова с их переводом и запиши.

| | |
|---|---|
| айыу | лев |
| төлкө | медведь |
| бүре | заяц |
| ҡуян | волк |
| арыҫлан | лиса |

**3.** Вставь пропущенные буквы в слова и запиши их.

..ыйыр, һары.., а.., сус..а, бесә.., к..зә

**4.** Соедини правильно слова.

| Кем? | Ни эшләй? |
|---|---|
| ашнаҡсы | тегә |
| тегеүсе | дауалай |
| врач | музыка яҙа |
| композитор | аш бешерә |

**Комплекслы йыллыҡ контроль эше.**

***1.*** *Вставь пропущенные слова. Запиши.*

Көҙ айҙары: сентябрь, …, …

Ҡыш айҙары: …, ғинуар, февраль.

Яҙ айҙары: март, …, …

Йәй айҙары: …, июль, …

*Слова для справок:* көҙ, июнь, ай, ҡыш, октябрь, декабрь, апрель, август, ноябрь, миҙгел, май.

**2.** Прочитай предложения и определи время года. Запиши ответ.

А)Был миҙгел яҙ менән көҙ араһында була. Бик эҫе ваҡыт.

Б) Был миҙгел ҡыш менән йәй араһында була. Ҡоштар йылы яҡтан беҙгә ҡайталар.

В) Был миҙгел көҙ менән яҙ араһында була. Һалҡын һәм ҡар күп ваҡыт.

**4.** Прочитай и запиши: верно(дөрөҫ) или неверно(дөрөҫ түгел)?

Бер йылда 12 ай.

Башҡортостанда көҙ дүрт ай була.

Июль айынан һуң сентябрь башлана.

Февраль айында 30 көн.

Ҡыш иң һыуыҡ миҙгел.

**Яуаптар.**

**Комплекслы инеш контроль эше.**

1. Бәлеш, мин, әсәй.
2. Соотнеси слова с их переводом и запиши.

айыу -медведь,төлкө-лиса, бүре-медведь, ҡуян-заяц, арыҫлан-лев

3. Вставь пропущенные буквы в слова и запиши их.

һыйыр, һарыҡ, ат, сусҡа, бесәй, кәзә.

4. Соедини правильно слова.

| Кем? | Ни эшләй? |
|---|---|
| ашнаҡсы | аш бешерә |
| тегеүсе | тегә |
| врач | дауалай |
| композитор | музыка яҙа |

**Комплекслы йыллыҡ контроль эше.**

1. Вставь пропущенные слова. Запиши.

Көҙ айҙары: сентябрь, октябрь, ноябрь.
Ҡыш айҙары: декабрь, ғинуар, февраль.
Яҙ айҙары: март, апрель, май.
Йәй айҙары: июнь, июль, августэ

3. Прочитай предложения и определи время года. Запиши ответ.

А) Йәй Б) Яҙ. В) Ҡыш.
Прочитай и запиши: верно(дөрөҫ) или неверно(дөрөҫ түгел)?
Бер йылда 12 ай. –Дөрөҫ.
Башҡортостанда көҙ дүрт ай була. – Дөрөҫ түгел.
Июль айынан һуң сентябрь башлана. - Дөрөҫ түгел.
Февраль айында 30 көн. - Дөрөҫ түгел.
Ҡыш иң һыуыҡ миҙгел. – Дөрөҫ.